## Донъяла

**АВСТРИЯ.** Урындағы властар талап итһә лә, Австрияның Ислам дини йәмғиәте хөтбәне немец телендә алып барыуҙан баш тартты. "Беҙ вәғәҙҙәрҙе немец телендә йышыраҡ алып барырға ҡаршы түгел, - тине йәмғиәт вәкиле Зәкәриә Сейдини, - ләкин имамдарҙы мәжбүр итергә тырышыу кире һөҙөмтә генә бирәсәк".

Сейдини әйтеүенсә, әлеге көндә Австрия мәсеттәрендә хөтбә ниндәй телдәрҙә уҡылыуы тураһында аныҡ ҡына мәғлүмәт юҡ. Ғәҙәттә, ҡайҙа ниндәй халыҡ вәкиле күберәк йәшәй, вәғәҙ шул телдә алып барыла. Ҡайһы бер мәсеттәрҙә хатта бер нисә телдә укыйҙар икән.

Австрияла вәғәҙәдәрҙе мотлаҡ немец телендә алып барыуҙы талап иткән хоҡуки нигеҙ юҡ. Интеграция эштәре буйынса дәүләт секретаре Себастьян Курц киләсәктә юғары уҡыу йорттарында Ислам дине факультеттары асып, үҙ имамдарын әҙерләп сығарыу зарурлығын билдерҙе. Һәр хәлдә, вәғәҙҙәрҙе немец телендә алып барыу мәсьәләһе хәл ителер ине, тиелә. Был һорау Сит ил эштәре министрлығына күптән көнүҙәк итеп ҡуйылһа ла, әлеге тиклем эш башланғаны юҡ.

**ТӨРКМӘНСТАН ҠАТЫН-ҠЫҘҘАРЫНАН ХӘҘЕР ДОКУМЕНТ ӨСӨН ФОТОҒА ТӨШКӘНДӘ БЕР ИШ КЕЙЕМ КЕЙЕҮҘЕ ТАЛАП ИТӘЛӘР.** Төркмәнстан йәнә лә үҙенең "тигеҙләй белеү" тәртибе менән "танылыу алды". Юғары дәүләт эшмәкәрҙәре гүзәл заттарҙың барыһын да документа бер иш рәсемдә күрегә телай, йәғни улар яғаһы сигелгән ҡыҙыл төҫтәге милли күлдәк кейергә, ә баштарын түбәтәй йәки яулыҡ менән ҡапларға тейештәр. Был эште алып барыуҙа бигерәк тә Төркмәнстандың Мәғариф министрлығы һәм уға ҡараған учреждениелар ҙур әүҙемлек күрһәтә. Етәкселәрҙең теләге менән ҡул аҫтындағы хеҙмәткәрҙәрҙең "Личное дело"лағы фотоһүрәттәре яңылары менән алмаштырылды. Был талап төркмән һылыуҙарын ғына түгел, ә барлыҡ этник төркөм ҡатын-ҡыҙҙарына ла ҡағыла. Дөрөҫ, аҙаҡҡылары өсөн ташланма яһалды: башҡа яулыҡ ябынмаҫҡа мөмкин, ләкин милли күлдәк барыһы өсөн дә мотлаҡ булып ҡала.

**РӘСӘЙ ФӘНДӘР АКАДЕМИЯҺЫ АКАДЕМИГЫ ЕВГЕНИЙ ПРИМАКОВ МӘСКӘҮҘӘ "ЯҠЫН КӨНСЫҒЫШ: СӘХНӘЛӘ ҺӘМ СӘХНӘ АРТЫНДА" ТИГӘН КИТАБЫНЫҢ ЯҢЫ БАҪМАҺЫН ТӘҠДИМ ИТТЕ.** "Тәүге китапта XX быуаттың икенсе яртыһындағы хәлдәр һүрәтләнгәйне. Ә үткәнгә кабаттан ҡараш ташлау - бөгөнгө хәл-вакиғаларҙы нығыраҡ аңларға ярҙам итә, - тине Примаков. - АҠШ яңы быуын консерваторҙары йоғонтоһонда тик бер полярлыкка нигеҙләнгән донъяға йүнәлеш алды. "Интервенциолизм" тип аталған сәйәсәт һөҙөмтәһендә, беҙ бөгөн Иракта үҙегеҙгә мәғлүм хәлгә тарыныҡ".

XXI быуат вакиғаларына туҡталып, ғалим, Ливияла һәм Сирияла иң баштан уҡ хәлдәр "ғәрәп яҙына" тап килмәй ине, тине. "Был илдәрҙә тәүҙән уҡ ҡораллы алыш башланды. Бахрейнда, мәҫәлән, вакиғалар үҙенән-үҙе калкып сыкты, ә Сирия менән Ливияла АҠШ бөтәһен дә үҙ ҡулдарына алырға тырышты, шул арҡала америкалылар ундағы радикалдар менән бер "арбаға" ултырҙы", - тине автор.

Яңы китапта элек сер тип тотолған, әммә Примаковтың һорауы буйынса "тыйылған" билдәһе алынған документтар ҙа файҙаланылған. Шәрек илдәре башлыҡтары менән булған күп һанлы осрашыуҙарға ла баһа бирелә.

## Тарих биттәренән

# МӨФТӨЙ ХӘҘРӘТ ВАСЫЯТЫ

"Әһле исламды таратыу, араларына айырылышыу һәм дошманлыҡ һалыу маҡсаты менән хөрмәтле кешеләргә мәғлүм булған бер көс тарафынан "Башҡорт мөфтилеге" исеме менән "ләйле ғамәлфиғел" мәғәнәһенә әскәрһеҙ һаналған һәйәт (Коллегия) тарафынан дауамдары тәьмин ителгән бер идара бар ине.

Идараның әһәмиәтле вазифаһы ла бер быуаттан артыҡ вакыт дауам итеп килгән Диниә назаратын таратыу һәм унда хеҙмәт итеүселәрҙе һәр төрлө юлдар менән яманлап әһле ислам күҙҙәренән төшөрөү, һуңынан ябырға мәжбүр итеү, шул ысул менән әһле ислам араһында бәйләнеш булыуын хөкөм аҫтында ҡалдырып, юҡҡа сығарыу ине. Юҡһа, бер ҡәбиләгә ҡараған һәм бер пәйғәмбәргә эйәргән һәм бер Ҡөрьән менән ғәмәл ҡылған, хатта әләшсә мәсьәләләрҙә лә ҡаршылыҡтары булмаған йәмәғәттең бер-берсенән айырылыуына шәриғәт ҡанундарына яраҡлы бер сәбәп юҡ ине...

Ырымбур шәһәренә милади менән 1917 йылда йыйылған Башҡорт ҡоролтайы үҙҙәренә айырым дини идара һәм шуға ярашлы шәйхелислам исемле дәрәжәлә бер рәйес һайлау хаҡында ләйхә (проект) төҙөлгән булһа ла, был эш Башкортостанды Рәсәйҙән башҡаларҙан айырылып торған бер виләйәте итеп, уның эске эштәрендә тамам мөстәҡил йәшәү нигеҙен белдерҙе ине. Һуңынан башҡорттар большевиктар менән солох төҙөнөләр һәм килешеү яһанылар, шул ваҡытта Ырымбур ҡоролтайында булған бөтөн ләйхәләрен һәм һәммә ҡарарҙарын ғәмәлдән сығарҙылар һәм урынһыҙ булғанлығын әйтеп ҡалдырҙылар. Шуның өсөн был көндәге "Башкорт мөфтилеге" менән ҡоролтай шәйхелисламы араһында аҙ ғына ла мөнәсәбәт юҡ. Был бер. Икенсе, башкорт ҡоролтайындағы шәйхелислам ләйхәһе әүәлге дини идараны (Ырымбур назаратын) һәм дә Ҡырым һәм Төркөстан мосолмандарын мәҙкүр шәйхелислам идараһына йыйыу фекеренә билгеле иҡәнлекте ҡоролтай башында йөрөүселәренән йәшерен һәм сер сүрәтендә аңлаған ине. Һәр хәлдә ул вакыттағы фармандарҙың йөҙҙән бере лә майҙанға сыкманы".

Һәр хәлдә, башланғыс һәр йәнәттән зәғиф булған, тип, мөфтөй хәҙрәт Ризаитдин бин Фәхретдин, тарихи болаларҙың башланып китеүҙәренең сәбәптәрен иҫкә төшөрә. "Быуаттар буйы урыҫтарҙан, насранизар тарафынан һәр төрлө йәберҙәр һәм яфалар, ҡайғылар һәм бәләләр күреп килгән төньяҡ мосолмандарының дини һәм милли мәнфәғәттәре, бер-берсенә якын, шуға ла мәсьәлә ике дини идара тәҙөүҙә түгел, бәлки, бер идараны, ҡулдан килгәнсә заманға һәм хәлгә талапка килтереп, көсләндереүҙә ине. Әһле Исламдың бәхетһеҙлектәре, бәлки лә, бәғзе тайфаларының аңһыҙлыҡтары сәбәбенән, мәҙкүр үткән зирәклек эйәһе майҙанға килде, һәм шунда урынлашып хеҙмәт итеүселәре лә табылып торҙо. Инна лиллаһи үә инна иләйһи раджиғун.

Байлыктары урта, көстәре лә камил түгел мосолмандарҙың бер ҡалала ике дини идара төҙөүҙәре, бер-берсенә терәп ике йәмиғ бинаны тотоноуҙары файҙаһыҙ һәм мәғәнәһеҙ эш кенә түгел, бәлки дин дошмандарының икмәктәренә май һөртөү, шуларҙың маҡсаттарына хеҙмәт итеү һәм үҙ-араларында (дошмандарҙың) улар ҙан көлөүҙәренә, мосолмандарҙың ҡыҙыулыҡ менән эш итеү сифаттарын бәйән итеүгә, һүҙ йөрөтөүгә сәбәп булған бер эш ине", - тип яҙа бөйөк башҡорт ҡамусҫы ғалимы Ризаитдин бин Фәхретдин.

***(Р.Фәхретдин, "Аҫар", ж.3, 329-сы бит, ҡульяҙма, БЙ ФА китапханаһы).*** Ғәрәп әлифбаһы менән яҙылған төркиҙән тәржемә ителде. Тәржемә өсөн яуаплы Сибай ҡалаһының шәйех Ғабдулла Сәиди ис. йәмиғ мәсете имамхатибы **Гариф АБДРАХМАНОВ.**

## Беҙгә килгән хаттарҙан

*Сафия ХӘЙБУЛЛИНА,*
*Ишембай районы,*
*Яңы Әптек ауылы*

"Хөрмәтле редакция хеҙмәткәрҙәре!

Мин "Рисәләт" гәзитен 2008 йылдан алдырып уҡыйым. Уға тиклем бындай матбуғат баҫмаһы барлығын белмәй инем. Дини мәғлүмәт биреүсе "Рисәләт" миңә бик оҡшай. Эшегеҙҙә уңыштар, һаулыҡ, ғаилә бәхете теләп ҡалам".

*2012 йылдың ғинуар һанында сыккан башваткыска дөрөҫ яуаптар ебәргәне өсөн беҙ, йәғни редакция хеҙмәткәрҙәре, үҙ сиратыбыҙҙа, Сафия ханымға рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ, сәләмәтлек, кыуаныстар, имен тормош теләйбеҙ.*

## Ихласлыҡ

Һеҙ был ирҙең кем икәнен беләһегеҙме? Уның исеме Рәшид Никаз. Хәйер, эш уның исемендә түгел, ә есемендә. Францияла күптән түгел "Никабты тыйыу" тураһында закон сыкканын бөтәһе лә беләләр. Ә был бай кеше шул көндә уҡ матбуғат саралары аша мөрәжәғәт итте: "Францияның мосолман ҡатын-ҡыҙҙары! Үҙегеҙҙең никабығыҙҙа рәхәтләнеп йөрөгөҙ, һеҙҙең өсөн штрафты мин түләйәсәкмен!".



Һәм ул никаб (хижаб) кейеүсе ҡатын-ҡыҙҙың штрафын түләр өсөн 1 миллион долларҙан фонд ойоштorҙо.

# Көн хәҙисе




Мөхәммәд пәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) әйткән: "Һөйгән, бала таба торған һәм ирҙәрен бағa белгән ҡатындар барыһы ла Йәннәт әһелдәре буласаҡ. Бындай ҡатын ирен асыуландырған булһа, үҙенең ҡулын иренең ҡулына һала һәм шулай тип әйтәсәк: "Һин минән ҡәнәғәт булғанға ҡәҙәр мин керпек тә ҡаға алмаясаҡмын". *(Ибн Асакир. "әс-Силсилә әс-Сәхих", 287).*

Мөхәммәд пәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) әйткән: "Ир кеше өсөн, уның үҙенә харам булған ҡатынға ҡағылғанға ҡарағанда, башына тимер энә менән ҡаҙауҙары хәйерлерәк!" *(Ат-Табарани "әл-Кабир", 20.210. Имам Ибн Хаджар әл-Хайтами һәм шәйех әл-Әлбани хәҙистең дөрөҫлөгөн раҫлай. "әз-Зәуәджир" 2.14, "әс-Силсилә әс-сәхих", 226).*

## Күңел нуры

# Шөкөр итергә онотма

Шөкөр итеү - тормошонҙо бәрәкәтләндереүсегә, ризыкниғмәтен әҙәлекһеҙ биреүсегә рәхмәт белдереүҙе аңлата. Беҙ иң элек Аллаһҡа шөкөр итергә тейешбеҙ, сөнки Ул был донъяла ла, ахирәттә лә үҙенең бөйөк ниғмәтен биреүсе.

"Миңә зикер итегеҙ, һәм Мин дә һеҙҙе иҫтә тотормон. Миңә шөкөр итегеҙ, кафырҙарҙан булмағыҙ" ("Бакара", 152).

Ибн әл-Ҡайим шулай тигән: "Йөрәк менән шөкөр итеү - күңдәмлек һәм сабырлыҡ; тел менән шөкөр итеү - Раббыны маҡтау, ололау һәм шаһитлыҡ итеү; ағзалар менән шөкөр итеү - буйһоноу һәм сәждә итеү".

Имандың башы булған шөкөр итеү өс тәрәккә ниғеҙләнә: Аллаһтың кешегә һәм барлыҡ мәхлуктәргә мәрхәмәтен бөтөн йөрәгең менән таныу; бының өсөн Аллаһҡа зикер әйтеү, уны маҡтау; ниғмәт биреп, мәрхәмәт итеүсе Хаҡ Тәғәләне танып, Уға буйһоноу һәм Уға ғибәҙәт итеү.

Хафиз Абу Муса шулай тигән: "Хәсән ибн Али әйткәйне: "ошо егерме аятты укыусыларҙы Аллаһы Тәғәлә залимдарҙан, шайтан вәсвәсәһенән, йыртҡыстан һәм ҡараҡтан һаҡлар":

"Бакара", 255-се аят,
"Кәртәләр", 54-57-се аяттар,
"Сафтарҙа тороусылар", 1-10-се аяттар,
"Шәфҡәтле", 33-34-се аяттар,
"Йыйылыш", 21-24-се аяттар.

# Рәғәиб кисе

Исмәғил ҒИБӘҘУЛЛИН

Рәғәиб кисе Рәжәб айының түгe йомаһында була. Мосолмандарҙа тәүлек кистән башлана. Тәүлектә иң элек кис тыуа, унан төн килә, таң ата һәм көн тыуа.

Рәғәиб кисенең асылы шунда: был кисте буласаҡ пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәдтең (с.ғ.с.) атаһы менән әсәһе никахлаша һәр ир менән ҡатын булып ҡауыша. Аллаһы Тәғәләнең ихтыяры менән Әминә балаға уҙа. Быны шундай олуғ кис ул Рәғәиб кисе.

Рәғәиб - Аллаһы Тәғәләнең ярлыканыуына өмөт, Уның үҙ ҡолдарына мәрхәмәте, уларҙың ялбарыуҙарын һәм доғаларын ишетеү, тигәндә аңлата.

Был төнгә шул тиклем ҙур хикмәт һалынған, уны беҙ аңлап та бөтөрә алмайбыҙ. Шуға ла был кистә мосолманға ғибәҙәттә булырға, тәүбә итергә, Аллаһтан ғәфү һорарға тейеш, ҡаза намаҙы уҡырға, саҙаҡа бирергә, фәкирҙәргә ярҙам итергә, бала-сағаны ҡыуандырырға, ата-әсә, туғандарының хәлен белешергә, нығыраҡ ҡатнашырға, улар өсөн доға уҡырға кәрәк. Рәжәб айының бәрәкәте тураһында һөйләнгән сағында бер карт Пәйғәмбәребеҙгә тоташ ай буйы ураҙа тота алмауын әйткән. "Һин айҙың тәүге көнөндә, ун бишенсе һәм аҙаҡҡы көнөндә ураҙа тот. Бер айлыҡ ураҙаның бәрәкәтен алырһың. Сөнки яҡшы ғәмәл ун тапкыр арттырып яҙыла. Ләкин Рәжәбтең беренсе йомаһындағы төндө онотма", - тип яуап бирә Пәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.).

## Бер кәлимә һүҙ

# Бөтәһе лә һинең ҡулында

Борон заманда бер ҡалала Остаз йәшәгән, ти. Уның уҡыусылары күп булған. Шулар араһынан иң һәләтлеһе: "Остазыбыҙ яуап бирә алмаған берәй һорау бармы икән?", - тип уйлаған. Ул сәскәле болонға сыға ла иң матур күбәләкте тота, уны усына йома. Күбәләк йомшаҡ аяҡтары менән уның ҡулына йәбешеп дерелдәй, бынан уҡыусының ҡытығы килә. Ул йылмайған килеш Остаз янына килә:

- Зинһар, әйтегеҙ, ниндәй ул минең усымдағы күбәләк? Тереме ул, әллә үлеме? - тип һорай.

Һәм үҙ хәкикәте өсөн күбәләкте һытырға әҙер булып, усын йәтешләп тота. Остазы: "Тере", тиһә, һытасаҡ, "үле" тиһә, усын яҙып, осорор ебәрәсәк.

Аҡыл эйәһе иһә уның ҡулына ҡарап та тормай, шулай тип яуап бирә:

- Ҡулың ниндәй эшкә бара бит, бөтәһе лә тик шунан ғына тора.